50696-0 Д ър Күз
Башкирский я.
Абдуллин М.

# ВАТАН ҺУҒЫШСЫ ГЕРОЙҘАРЫ

**ҠЫҘЫЛ АРМИЯ АРТИЛЛЕРИСТӘРЕ! ДОШМАНДЫҢ НЫҒЫТМАЛАРЫН, ҠАРШЫЛЫҠ ҠҮРҺӘТЕҮ УЗЕЛДАРЫН ҺӘМ ТЕРӘК ПУНКТТАРЫН ҠЕҮӘТЛЕ УТ УДАРҘАРЫ МЕНӘН ЕМЕРЕП БӨТӨРӨГӨҘ! БЕҘҘЕҢ ҺӨЖҮМ ИТЕҮСЕ ҒӘСКӘРҘӘРЕБЕҘГӘ ЮЛ АСЫҒЫҘ, ДОШМАНДЫҢ ЙӘНЛЕ КӨСТӘРЕН ҺӘМ ТЕХНИКАҺЫН ЮҠ ИТЕГЕҘ!**



## СОВЕТТӘР СОЮЗЫ ГЕРОЙЫ

# МАНСУР АБДУЛЛИН

Всесоюзн. книжн. библ-ка имени В. И. Ленина

## ХАЛҠ БАТЫРЫ

Орудие командире гвардия старший сержанты комсомолец Мансур Һидиәт улы Абдуллин 1938 йылдан алып Ҡыҙыл Армия сафында. Боевой өйрәнеү йылдарында Абдуллин һуғыш эшен камил үҙләштерҙе һәм артиллерия һуғышы оҫтаһы булып әүерелде. Бөйөк Ватан һуғышы башланып китеү менән Тыуған илдең ғәйрәтле улы немец фашистәренең йыртҡыс бандиттәренә ҡаршы һуғышҡа ынтылды.

Бына инде ике ярым йылдан артыҡ комсомолец Абдуллин рустар, украинецтәр, үзбәктәр, ҡазаҡтар, грузиндәр, әрмәндәр менән бер сафта, ҡулына ҡорал тотоп, Бөйөк Совет Тыуған иленең намыҫын һәм данын яҡлап һуғыша.

Мансур немецтәрҙе Сталинград янында ла, Дон далаларында ла туҡманы, ул уларҙы Көньяк-Көнбайыш фронтта ла, Орел районында ла туҡманы. Һәм һәр ерҙә еңеп сыҡты.

1943 йылдың йәй көндәре ине. Ҡойоп ямғыр яуа.

Төн ҡараңғылығына төрөнөп, беҙҙең батарея яңы ут позицияһына күсте. Төнгө тәрән тынлыҡта старший сержант Абдуллиндең расчеты үҙенең пушкаһын ҡулда күтәреп алып барҙы һәм бик әһәмиәтле 217-се ҡалҡыулыҡҡа урынлашты.

Бысыранған, еүешләнгән боевой дуҫтар, баштарын да күтәрмәйенсә, төн буйына окоптар ҡаҙынылар, йәшенеү урындары эшләнеләр, һуғыш припастары ташынылар. Иртә менән немецтәрҙең киҫкен атакаһы көтөлә ине. Нервылар һуңғы сиккә тиклем кирелгәндәр. Ләкин батыр воиндәр орудиенең эшләүен ҡат-ҡат тикшереп ҡаранылар. Мансур Абдуллин таң яҡтылығында алыҫҡа ҡарап дошманды ентекләп күҙәтте. Тап уйлағанса булып сыҡты. Яҡтырыу менән алыҫтағы ҡалҡыулыҡта өс немец танкыһы күренде.

— «Тигрҙар», — тине Абдуллин, һәм ул яңылышманы. Өс машина артынан тағы ла икәү килеп сыҡты, бишәү булдылар. «Тигрҙар» һәм «фердинандтар», ә улар артынан бер батальондан артыҡ дошман пехотаһы гвардеецтәр батареяһы өҫтөнә ябырылып килә башланылар.

Боевой дуҫтарҙың дошманға ҡаршы һуғышырға һәр ваҡыт әҙер торғандарын белһә лә, батарея командире:

— Егеттәр, әҙер булығыҙ! — тип иҫкәртте. Фашистәр, бер генә тапҡыр ҙа атмайынса, парадтағы кеүек, килпәләр ине.

Ара яҡынайғандан яҡынайҙы. Оҙаҡ та үтмәне улар совет позицияларына ҡарата көслө ут астылар.

Беҙҙең окоптарҙан алыҫ түгел ерҙә снарядтар шартлап ярыла башланы. Абдуллиндең орудиеһе артында ғына тупраҡ өйөрөлөп һауаға күтәрелде. Снаряд ташыусы Петреченконы һәм ҡороусы Ибраһимовты һауа тулҡыны бәреп йыҡты. Улар тыныс ҡына тороп өҫтәрен ҡаҡтылар һәм яҡынан үҙ урындарын алдылар.

Артиллеристәр яуап бирмәнеләр.

— Яҙлыҡмай атасаҡбыҙ! — тип батарея командире үҙ приказын ҡабатланы.

Абдуллин көскә генә тыйылып торҙо. Уң яҡтағы күрше расчет сафтан сыҡты. Абдуллин батарея командиренең приказын ҡабатланы:

— Яҡын ебәрергә!

Ҡот осҡос нәмә икенсе ҡалҡыулыҡҡа үрмәләп менде һәм шунда уҡ оҙаҡ көтөлгән команда яңғыраны:

— Ут асырға!

Ҡара төтөн өйөрөлөп күккә күтәрелде һәм «тигр» тынды.

— Булды! Рябикин, әйҙә, тағы ла!

Бына икенсеһе һәм өсөнсөһө сафтан сыҡты. Ҡот осҡос нәмәләр туҡтап ҡалдылар. Үҙҙәренең уңыштары менән дәртләнгән артиллеристәр флангынан дошман автоматчиктәренең килеп сыҡҡанын саҡ-саҡ ҡына күреп ҡалдылар.

— Осколочный менән! — тине Абдуллин.

— Була ул!

Болоттар артынан дошман бомбардировщиктәре килеп сыҡтылар һәм батарея өҫтөндә әйләнә башланылар. Бомбаларҙың шартлап ярылыуынан ер тетрәп һелкенде.

Расчет атыуын дауам иттерҙе. Орудие командире ярҙамсыһы Данилов батырҙарса үлде, Ибраһимов ныҡ яраланды. Дошман снаряды орудиенең щитен алып ырғытты, алғы өлөшөн емерҙе. Бары тик орудие командире менән наводчик кенә һау ҡалдылар.

Немецтәр ҡотороноп алға ынтылдылар. Батыр егет артҡа сигенеү тураһындағы фекерҙе башына ла килтермәне. Ул 217-се ҡалҡыулыҡтың әһәмиәте серьез еңеүгә тиң икәнен белә ине. Был ҡалҡыулыҡты тотоп ҡалыу — беҙҙең яҡынлашып килеүсе ғәскәрҙәребеҙгә дошманды иҙергә, немец оборонаһын өҙөргә мөмкинлек биреү тигән һүҙ. Был туған совет ерен — 217-се ҡалҡыулыҡты ҡулда тотоп ҡалыу өсөн һуғышыу—Бөйөк Тыуған илдең, туған Башҡортостандың намыҫын фашистәрҙән яҡлап һуғышыу икәнен ул бик яҡшы аңлай ине.

— Ант итәйек, Ваня, үлербеҙ ләкин дошманды үткәрмәбеҙ, — тине Абдуллин.

— Үткәрмәбеҙ, Мансур, — тип раҫланы Рябикин. Ҡаты һуғыш башланды. Ябырылып килгән немецтәрҙең алдында уҡ совет пушкаһы тағы ла ата башланы. Тағы ла бер нисә минут үтеүгә, дошмандың ике танкыһы бер үк ваҡытта тейерлек тоҡанып яна башланы. Юлда дошман пехотаһы тейәлгән үндан артыҡ автомашина күренде.

— Осколочный менән!

— Була осколочный!

Абдуллин беренсе снаряды менән үк башлап килеүсе машинаны ҡыйратты. Унан һуң утты колоннаның артына күсерҙе. Таш юлда күҙ алдына килтергеһеҙ этеш-төртөш башланды. Абдуллин, һалҡын ҡанлылыҡ менән түҙәп, машиналарҙың береһе артынан икенсеһенә атты. Тиҙ арала алты автомашинаны ла ут ҡаплап алды.

Тағы ла танкылар күренделәр. Улар ҡотороноҡо тиҙлек менән совет пушкаһы өҫтөнә килә башланылар. Ләкин Абдуллин броня тишкес снарядтар менән мәргән рәүештә атып бер танкыны сафтан сығарҙы. «Тигр» тоҡанып яна башланы. Комсомолец Абдуллин, шатлыҡ тойғоларына сумып, атты ла атты.

Тағы ла бер танк тоҡанып яна башланы. Бына икенсеһе лә тоҡанды. Ҡыйратылған танкылар артынан килгән дүртенсе танкыға ла Абдуллин снарядын ебәрергә өлгөрҙө. Ләкин Абдуллин ул танкының сафтан сыҡҡанын сыҡмағанын хәтерләй алмай. Яҡында ғына шартлаған снаряд уны контузиялай һәм яралай. Мансур аңын юғалта башлағанда ҡеүәтле «ура» тауышын ишетте.

Герой яраланыуының өсөнсө көнөндә полевой госпиталдә күҙҙәрен асты.

Немецтәрҙең 8 ауыр танкыһын һәм бер батальонға яҡын пехотаһын юҡ иткән батыр Башҡортостан егетенең подвигтәренә Тыуған илебеҙ һәм хөкүмәтебеҙ юғары баһа бирҙе.

Михаил Иванович Калинин Абдуллингә Ленин ордене һәм «Алтын Йондоҙ» медале тапшырҙы.

Икенсе көндә батыр артиллерист туған Башҡортостанына ҡайтырға отпуск алды.

Колхозсылар геройҙы ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алдылар. Бөйөк награда алыуы һәм ҡайнар осорашыу менән дулҡынланған Мансур Абдуллин немецтәрҙе тағы ла ғәйрәтлерәк туҡмарға, уларҙан тағы ла ныҕыраҡ үс алырға яҡташтарына һүҙ бирҙе.

Батыр егеттең даны бөтә илдә яңыраһын! Уның подвигтәре барлыҡ совет воиндәре өсөн өлгө булып хеҙмәт итһен!

Немец баҫҡынсыларына үлем!

**УҠЫҒАС, ИПТӘШЕҢӘ БИР!**

**Ҡыҙыл Армияның Баш Политик Управлениеһе**

ГЛАВНОЕ ПОЛИТИЧЕСКОЕ УПРАВЛЕНИЕ КРАСНОЙ АРМИИ.

Листовка посвящена доблестному сыну Башкирии Герою Советского Союза **Мансуру Абдуллину.**

Воениздат НКО. 1944 г. **НА БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ.** Г. 531722